*Зилә МАҺИЯРОВА,*
*педагогика фәндәре кандидаты,*
*Илдар МАҺИЯРОВ*

# Фронтовик атайҙарҙың тормош хәтирәләре һаҡланһындар беҙҙең хәтерҙә

Тормош юлында бала саҡ, үҫмер ваҡытта хәтергә инеп урынлашҡан хәтирәләр беҙҙе ғүмер буйы эйҙәп бара. Инде үҙебеҙ ҙә олоғаябыҙ, әммә тап ошо иҫтәлектәр беҙҙе шәхес булараҡ формалаштырған. Улар атай образы менән бәйле. Шул хәтирәләрҙе ҡәҙерләп иҫкә алыу теләге ҡулға ҡәләм алырға этәргес булды. Иҫән ваҡытында беренсе уҡытыусым — атайым хаҡында яҙа алмаһам да, хәҙер килеп бөтә уҡытыусыларыма рәхмәтемде ошо иҫтәлегем аша еткерергә тырышам...

*Беренсе хәтирә.* Атайыбыҙ Маһияров Миңлеғаян Фәтхелбаян улы тыуып үҫкән Яңыбирҙе ауылы таллы Ҡеүәш йылғаһын ике яҡлап урынлашҡан. Ул талдарҙы һуғыш ваҡытында халыҡ утынға ҡырҡып бөтөрһә лә, әлеге ваҡытта унда йәш ҡыуаҡлыҡтар тирә-йүнгә йәм биреп ултыра.

Ҡеүәш, һыуың тәмле,
Болондарың йәмле...

Билдәле композитор Роберт Миңнулин маҡтап яҙған Ҡеүәш инде ул. Яңыбирҙе атамаһы бер ҡарауға сәйер тойола. Атай һөйләүе буйынса, Сөрмәт ауылы янғын ваҡытында янып бөткәс, яңы урам шундай атама алған. Бирҙе ырыуынан беҙҙең яҡҡа күсеп ултырған кешеләр Бирҙе исемен ҡушҡан тип тә фаразларға мөмкин. Шуныһы ҡыҙыҡ: беҙ бала саҡта бәрәңге баҡсаһынан иҫ киткес матур, аллы-гөллө биҙәкле сынаяҡ ярсыҡтарын табып алып, "өй" уйнай инек. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҡайҙандыр күсеп килеп төпләнгән бай, эшсән кешеләр булғандыр, күрәһең. Шундай затлы сынаяҡтарҙан сәй эскән кешеләр кем икән һуң?

*Маһияров Миңлеғаян Фәтхелбаян улы*



Атайыбыҙ, ун һигеҙе лә тулмаған үҫмер егет, Рәжәп урта мәктәбенә дүрт саҡрым йөрөп, унынсы класта "4"-ле, "5"-ле билдәләренә генә уҡып йөрөгән еренән 1943 йылдың декабрь айында Бөйөк Ватан һуғышына алына. Тоцк хәрби лагерҙарында әҙерлек үткәндән

һуң фронтҡа ебәреләә. Беҙ немец телен белгән уҡыусыларҙы ғына уҡыу йылы уртаһында фронтҡа алғандар тигән фекерҙә инек, әммә тарихи документтар буйынса ул йылда ун һигеҙе тулмаған күп ир балалар һуғышҡа ебәрелгән икән.


Дорогой товарищ!

Военный Совет 2-го Украинского фронта горячо поздравляет Вас с правительственной наградой и желает Вам скорейшего выздоровления.

Командующий войсками
2-го Украинского фронта
Маршал Советского Союза
(Р. МАЛИНОВСКИЙ)

Член Военного Совета
2-го Украинского фронта
генерал-лейтенант
(А. ТЕВЧЕНКОВ)

ИЮНЬ 1945 г.
Действующая армия.

Ул 2-се Украина фронты составындағы 5-се танк корпусының 20-се гвардия бригадаһында санинструктор булып хеҙмәт итә башлай. Ҡиев, Буг, Прут, Яссы өсөн барған ҡаты һуғыштарҙа ике ҡабат яралана. 20-се гвардия танк бригадаһының 5-се моторизацияланған десант бригадаһы составында Ҡорсун-Шевченко йүнәлешендәге ауыр һуғышта гвардия санинструкторы старшина Маһияров танкистар менән берлектә илленән артыҡ кешегә медицина ярҙамы күрһәтеп, һуғыш яланынан алып сыға. Үҙе лә ҡаты яралана... Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнеүе тураһында архивтан алынған документтар бар. Рәсәй Федерацияһы оборона министрлығы үҙәк архивынан килгән документтар араһында түбәндәге хат беҙҙе тетрәндерҙе: атайыбыҙҙың ҡотлау хатына маршал Малиновский үҙе ҡул ҡуйған, тиҙерәк һауығыуына ышаныс белдергән! Шундай юғары етәксенең ябай һалдатҡа хат ебәреүе иң ҙур баһалыр ул. Бөйөк Ватан һуғышында халҡыбыҙҙың ошо тиклем батырлыҡ күрһәтеүе тураһында йәш быуынға әхлаҡи-патриотик йүнәлештә тәрбиә биреүҙә үрнәк алырлыҡ иҫ киткес миҫал был.

*Киләһе хәтирә.* Бөйөк Ватан һуғышында Еңеү яулап иҫән ҡайтҡан ир-егеттәр кеүек үк, запастағы старшина Маһияров мәктәп балаларына белем-тәрбиә биреү хеҙмәтенә алына. Ветеран уҡытыусылар, ҡағиҙә булараҡ, мәктәптә тарих, математика, физика кеүек фәндәрҙән уҡытты һәм мәктәп директоры булып эшләне (З.М.Маһиярова, И.М.Маһияров. “Ветеран уҡытыусылар — тәрбиә үрнәге”, “Башҡортостан уҡытыусыһы”, 1997, №10, 22—24-се бб.). Башҡа фронтовиктар кеүек үк, беҙҙең атай ҙа мәктәп директоры, директор урынбаҫары булып та эшләне. Ул Уҡсы йондоҙлоғо аҫтында тыуған. Уҡсыларға хас маҡсатына ирешеүсән



СПРАВКА
Центрального архива
Министерства обороны
142100, г. Подольск, Московской обл.

В наградном листе к приказу войскам 2 Украинского фронта № 0208/н от 8.06.1945г., по которому гвардии старшина м/с МОГИЯРОВ Миннегоян Фатхулбаянович (фамилия и имя – так в документе), 1925г. рождения, санинструктор 20 танковой бригады 5 танкового корпуса, награжден орденом Красной Звезды, записано:

«…в Отечественной войне с января 1943г. Киев, Буг, Прут, Яссы 1944г., 2 раза ранен, в Красной Армии с января 1943г., призван Шекмогушовским РВК Башкирская АССР (так в документе), ранее не награждался, домашний адрес: БАССР, Шекмогушовский район, д. Янобердено (так в документе).

Будучи в 4 десантном механизированном батальоне 20 гвардейской танковой бригады, участвовал в боях под г. Корсунь-Шевченковским. Действуя на танке совместно с десантниками, оказал более 50 десантникам и танкистам медицинскую помощь и вынес их с поля боя.

Участвовал в форсировании реки Прут. В прорыве обороны немцев под Яссы оказал более 10 танкистам медицинскую помощь. Вынес с поля боя и был тяжело ранен…»

Основание: ЦА МО РФ, фонд 33, опись 690306, дело 1406, лист 155.

Выписка дана с полным соблюдением текста документа.

Зам. начальника отдела
старший лейтенант М.Савельев

«02» февраля 2011г.

ысын ир-егет булды. Шул ныҡышмалығы, белемгә ынтылышы арҡаһында һалҡын бурандарҙа Рәжәп урта мәктәбенә дүрт саҡрым йөрөп уҡыған. Уларҙы татарса белмәгән уҡытыусы уҡытҡанға күрә, атайыбыҙ рус һәм немец телдәрендә иркен һөйләшә ине. Каллиграфик яҙыуға эйә атайымды юғары уҡыу йортон тамамлағанда дипломдар тултырырға ултыртҡандар. Районда рәсми документтарҙы (һайлау, награда ҡағыҙҙарын) атайҙы саҡыртып яҙҙыра инеләр. Әйткәндәй, балаларының тыуыу тураһында таныҡлыҡтары ла үҙ ҡулы менән тултырылған...

Һуғыштан һуңғы ауыр аслыҡ йылдарында Кушнаренко педучилищеһын тамамлай. Ошо ваҡыттағы бер хәтирә менән таныштырыу урынлы булыр, тип уйлайбыҙ. Атайыбыҙ, ҡыҙы тыуғас, паек итеп бирелгән тары ярмаһын балаһына алып ҡайтырға тип тоҡсайына йыйып барған. Тоҡсайҙы урлағандар. Әсәйебеҙ һаман беҙгә, атайығыҙ бала күңелле кеше ине, үҙе ашамаһа ашамаҫ, балаларын ҡайғыртыр тип, шул тары ярмаһы тарихын әле лә иҫкә төшөрә.

Атайым Өфө techinstitutында биология фәне буйынса юғары белем ала. Татар, рус, немец телдәренән уҡытты. Уның белемгә ынтылыуы беҙгә лә күскән, атайымдың һигеҙ балаһы араһында хәрби, ғалим, экономист, инженерҙар бар. Атайҙың тышҡы ҡиәфәте, өҫ-башы, ғөрөф-ғәҙәте һәр ваҡыт өлгө булды. Шул хәл дә иҫкә төшә. Ул Зиләһенең алтын-көмөш тағыуын бик өнәмәй ине, ә уҡытыусы апайҙар белем арттырыу курстарына киткәндә: “Минең сорокама бер “брушка” алып ҡайт әле, тыуған көнөнә бүләк итермен”, — тип һорауын хәтерләйҙәр.

Ҡиләһе иҫтәлек атайымдың уҡыусылары тураһында. Улар барыһы ла өмөтөн аҡланылар, тигән фекерҙә беҙ. Ул етәкләп алып килеп Өфө уҡыу йорттарына урынлаштырған уҡыусылар бөгөнгө көндә бик дәрәжәле кешеләр. Атайымдың мине лә Өфө педучилищеһына уҡырға индереп йөрөгәне хәтеремдә. Балаһын белемле итеп күргеһе килгән һәр ата-әсә һөнәри уҡыу йорттарында уҡытып сығарыу өсөн бөтә көсөн түгә. Мин документтарымды педучилищеға тапшырып ҡайтҡас, Лилиә һеңлем бәләгә тарыны. Ул йылдарҙа уҡытыусылар ашлыҡ йы-

йыу осоронда механизаторҙарға төшкө аш алып барырға тейештәр ине. Әсәйем урынына ризыҡ илткән 12 йәшлек һеңлем трактор арбаһынан төшкән саҡта арба аҫтында ҡалып, ҡаты йәрәхәтләнә. Атайым беренсе медицина ярҙамы күрһәтеп, Саҡмағош дауаханаһына һалды. Мин һеңлем эргәһендә ҡалдым. Хирург Балабанов: "Ағай, баланың аяғы төҙәлерлек хәлдә түгел, ампутация яһарға кәрәк", — тине. Атай: "Юҡ, туған, ҡырҡмайһың, мин үҙем дә ауыр йәрәхәтле һалдаттарҙы һуғыш яланынан алып сығып, үлемдән ҡотҡарған фронтовик. Тыныс ваҡытта аяҡһыҙ ҡыҙ баланы күҙ алдына килтер ҙә, аяғын һаҡлап ҡалырға тырыш", — тине. Рәхмәт ул табип ағайға, һеңлемдең бер нисә урындан һынған аяғын оҙаҡ дауаланылар, һәм ул төҙәлде. Әлеге ваҡытта Рафиҡ кейәү менән ике аҡыллы бала үҫтереп, ейәнсәрҙәренә ҡыуанып йәшәйҙәр. Лилиәбеҙ шиғырҙар ижад итә, йыйынтығы ла баҫылып сыҡты.

1961 йылда мин дә педучилище студенты булдым. Беҙ килгәндә имтихандар тамамланған, төркөмдәр бүленгән ине. Атайым директорҙы минән өҫтәлмә имтихан алырға күндерҙе. Шуны асыҡлап әйтергә кәрәктер: директорыбыҙ Хөсәйенов ағай иҫ киткес аҡыллы етәксе, оло шәхес ине. Мин быны бөгөнгө педагогик тәжрибәмә таянып әйтә алам. Рус теленән диктантты "5"-кә яҙҙым, математиканы "4"-кә бирҙем, һәм мине уҡырға ҡабул иттеләр. Институтта уҡығанда ла атай ятлатҡан рус теле ҡағиҙәләре ҡотҡара ине. Әйтеп китергә кәрәк: уҡытыусы Зоя Солтанғәли ҡыҙы ла мәктәптең һәләтле балаларын Өфөгә уҡырға индерешеп йөрөгән.

*Тағы бер хәтирә.* Рус теле тигәндән, бер ҡыҙыҡ ваҡиға иҫкә төштө: мәктәпте тамамлап, армия сафтарында хеҙмәт итеүсе егеттәребеҙ ялға ҡайтҡас, атай янына (ярты ҡыҫтырып, әлбиттә, имеш, үҫкәндәр) рәхмәт әйтергә инәләр. Шулай бер ваҡыт ата-әсәләр йыйылышында атайыбыҙ: "Мин әле бахмурҙан, фәлән уҡыусыларым рәхмәт әйтергә ингәйнеләр, оҙаҡлап һөйләшеп ултырҙыҡ", — тимәһенме! Эсмәгән-тартмаған атайымдың былдай сәйерлегенә башҡа уҡыусылар алдында нык уңайһыҙланғайным. Ә бөгөн аңланым: был атайҙың педагогик алымы булған. "Баламдың башын ҡатырма шул рус телең менән, нимәгә кәрәк ауыл балаһына өҫтәмә дәрестәр?" — тип йөрөгәндәр миҫалында башҡа атай-әсәйҙәргә тәрбиәүи үрнәк сараһы икәнлеген беләм дә бит хәҙер... "Бахмур" һүҙе уҡытыусы һөйләшендә артыҡ булғандыр, бәлки, иҫән булһа, ниндәй тәрбиәүи мәғәнә менән әйтелгәнен асыҡлар инек... Филология белгесе булараҡ, йыш ҡына мәҡәл, әйтем ҡулланыр ине: "Эт өрөр — бүре йөрөр", "Көнсөл кеше — күтәрмә аҫты көсөгө: өрә, әммә тешләй алмай" һ.б.

Беҙ атай менән педагогика темаларына йыш һөйләшә инек. Почтальон Фәүзиә апай ҡосаҡ-ҡосаҡ гәзит-журналдар индерә. Үҙем уҡытыусылыҡҡа белем алғас, "Учительская газета"ны асам. Ундағы В.Ф.Шаталовтың терәк сигналдары тураһындағы мәҡәләне уҡып сыҡҡас: "Атай, ҡара әле, был уҡытыусы һинең кеүек уҡыта икән", — тинем. Ул мәҡәләне ҡарап сыҡты ла, серле бер интонация менән: "Эйе, ҡыҙым, беҙ ул уҡытыусы менән кәңәшләшеп эшләйбеҙ шул", — тип шаяртып ҡуйҙы. Атай терәк сигналдар методикаһын бер нисә йыл элек уйлап сығарғанын беләм бит инде, үҙемде уҡытты. Ләкин унда маҡтаныу тойғоһо юҡ ине. Педучилищеның рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әлфиә Ниғмәтовна атайҙың "Башҡортостан уҡытыусыһы"нда баҫылып сыҡҡан мәҡәләһен маҡтағанда, атайым менән ғорурланыу хисе сигенән ашҡаны әле лә хәтерҙә.

Беҙҙең өйҙә китаптар күп ине, әсәй әйтмешләй, атай китап йыйҙы ла китап йыйҙы. Татар, рус классиктары әҫәрҙәренең үҙе тәрбиәүи әһәмиәтле тип һанаған урындарын беҙгә лә ҡысҡырып уҡый ине. Аҙаҡтан ҡыҙып-ҡыҙып бәхәсләшәбеҙ, әсәй генә тынысландыра ине. Китаптарының, үҙе эшләгән уҡытыу методикаһы әсбаптарының каталогын төҙөнө. Бер мәл әсәй мәктәптән ҡайтып инһә, ни күрә: Мәҙинә һеңлем әсбаптарын иҙәнгә таратып йәйеп уйнап йөрөй икән. Әсәй менән һеңлеләрем карточкаларҙы, конверттарҙы тиҙ генә, атай ҡайтмаҫ элек тултырып, кире урынына ҡуйғандар. Бер аҙҙан атай: “Уҡыусылар тәртип белмәй инде, карточкаларҙы бутап бөткәндәр”, — тип әсәйгә зарлана икән. Әсәйгә дөрөҫөн әйтергә тура килгән, уҡыусыларына сәбәпһеҙ рәнйемәһен, тигәндер инде. Ҡайһы берәүҙәр атайҙың ҡыҙыулығын, тиҙ ҡабынып китә торған саҡтарын иҫкә ала торғандыр. Ләкин ул бик тиҙ һыуына, һуңынан үкенеп бөтә алмай. Шул уҡ ваҡытта иҫ киткес шаян кеше ине ул. Үҙе шаяртырға ярата, башҡаларҙың да урынлы шаяртыуынан рәхәтләнеп көлә.

Миҫал өсөн бер генә хәтирә: күрше ҡыҙҙар әсәйебеҙҙең тегеү машинаһында тегергә, йәиһә үтек һорап торорға инәләр. Бер көн шулай күрше ҡыҙы Сания апай инде. Атай яҙып ултырған еренән: “Сания һеңлем, һиңә бағышлап йыр сығарғандар. Усман Әлмиев ағайың ана: “Сания апа һыуға бара, көйәнтәһе алмалы”, — тип йырлай. Ҡайҙан белгән икән һинең көйәнтәң алмалы икәнен”, — тине лә ҡысҡырып көлөп ҡуйҙы. Ул һәр кемгә — бала-сағамы ул, өлкән кешеме, үҙенең ыңғай мөнәсәбәтен күрһәтә белде. Бәлки, шуға ла, ауылдың ҡарты-йәше ололап уны исеме менән түгел, Маһияров ағай, тип өндәшә инеләр.

Йыр тигәндән, тауышы әсәйҙеке кеүек моңло булмаһа ла, йырларға ярата, хатта төндә уятып һораһаң да, теләһә ҡайһы йырҙың авторҙарын, башҡарыусының исемен әйтеп бирер ине. Сара апай Садиҡова, Рөстәм ағай Яхин көйҙәрен яратты, урманда бесән сапҡанда, утын ярғанда үҙ алдына көйләп йөрөй ине. Илдарына — “Аҡ сәскәләр”ҙең персонажы исемен, Илһамына күренекле йырсы Илһам ағай Шакиров исемен ҡушты. Барған еренән пластинкалар алып ҡайтһа, йәй көндәрендә асыҡ тәҙрә ҡаршыһына, эскәмйәгә яңы йыр тыңларға күршеләр йыйылған саҡтар бер ҙә онотолмай. Уҡытыусылар клубта спектакль, концерт ҡуялар, атайҙың “Зәңгәр шәл”дә Булат ролен уйнағаны иҫтә ҡалған.

Атайым мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн дә тәрбиәүи саралар ойоштора ине. Улар өсөн беҙҙең өйҙә йыл һайын шыршы байрамы уҙғарылып торҙо. Ҡыш бабай күстәнәстәрен һалырға атайҙың биш балаһы гәзиттән кис буйына пакет яһай. Унда әллә ни күп тәм-том булмаһа ла, бер-ике печенье, өс-дүрт кәнфит ине. Хәҙер “Дунькина радость” тип йөрөтөлә торған кәнфит барыбыҙ өсөн дә ҙур шатлыҡ. Күрше Рәфҡәт ағай гармунда уйнай, балалар бейей, йырлай, кемдер шиғыр ятлап килгән, мин Ключникова апай булып көлөп күрһәтәм...

Тормош — сәбәп-йомғаҡлауҙар сылбыры, тинек. Был хәҡиҡәткә олоғая барған һайын инана бараһың. 17—18 йәшлек үҫмерҙең ҡот осҡос һуғышта күргәндәрен иҫкә алһаҡ, тормоштоң иң ауыр, иң михнәтле саҡтарында ла атайымдың күңелендә изгелеккә, мөхәббәткә урын ҡалған икән, тип ҡуяһың.

Атай фронтта санинструктор булып хеҙмәт иткәндә күргән-белгән тәжрибәһе донъя көткәндә кәрәге тейҙе. Ауылда ниндәй генә хәлдәр булһа ла (янғында бешеү, һыуға батыу, авария һ.б.), ун ике саҡрым алыҫлыҡтағы Балтастан ашығыс ярҙам килеп еткәнсе, беренсе ярҙамды атай күрһәтә — йәрәхәттәрен таҙартып, дезинфекция яһап, бинтлап ҡуя. Атайҙың “кендек әбейе” булғаны ла бар.

Беҙҙең хәтирәләрҙе уҡыусылар араһынан ҡайһы берәүҙәрҙең: “Атайҙарының берәй етешһеҙ яҡтары булдымы икән ул?” — тигән һорауы тыуыр. Әлбиттә, етешһеҙлекһеҙ кеше буламы? Тәртип-ғәмәлдәрендә, аралашыу мөнәсәбәтендә ҡиммәттәрҙе һайлап файҙаланыу һәләтенә эйә булған фронтовик-уҡытыусылар ине улар. Шуға күрә беренсе ҡарашҡа тиҫкәре булып күренгән ҡылығы ла ыңғай һөҙөмтәгә эйә. Мәҫәлән, ҡат-ҡат уйлап фекер йөрөтөүсе нескә күңелле атайыбыҙ өс балаһын ҡалала өлкән кластарҙа интернат-мәктәптә уҡытты. Эйе, ата-әсәһе иҫән балаларҙы интернат-мәктәптә уҡытыу, бер ҡараһаң, ғәжәп хәл. Ләкин ул аҡылы менән шуны ла аңлаған: алдынғы техник юғары уҡыу йорттарына имтихан биреп инеү өсөн бөгөн дә ауыл балаһына рус телен яҡшы белеү кәрәк. Уларға, һис шикһеҙ, ғаилә йылыһы, ата-әсә наҙы етмәгәндер, әммә компетентлы, юғары хөрмәткә лайыҡлы туғандарыбыҙ бөгөн атайыбыҙға рәхмәтле. Уларҙың береһе — Илдар, дүрт йәшлек сағында быcрап бөткән өйрәк бәпкәләрен йыуындырып ҡойма башына элеп ҡуйған бала, — бөгөн полковник. Саҡмағош районынан Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан фронтовик-уҡытыусылар тураһындағы мәҡәләгә ингән архив документтарҙы ул тупланы.

Шуныһы ла хәтергә уйылған: аҙна аҙағында һәр уҡыусы көндәлегенә ата-әсәһенән ҡултамға ҡуйҙыра бит. Атай: “Ҡарале, әсәһе, гел “бишле” бит бында (*көндәлектә*). Уҡытыусылар минең ҡыҙым булғанға ғына ҡуяларҙыр инде”, — тип әйтә... Мин үпкәләйем, ә әсәй — беҙҙең арбитр: “Шаярта бит ул, ҡыҙым, ана үҙе лә рус теленән “5”-ле ҡуйған бит”, — тип тынысландыра. Хәҙер был ҡылығы беҙҙе артабан да маһаймай, тырыш кеше итеп үҫтереү сараһы булыуын бик яҡшы аңлайбыҙ. Һуңғы бер миҫал: кисен беҙҙе бер ҙә киске уйынға, киноға ебәрмәне. “Һеҙгә рөхсәт итһәм, төндә йөрөп, йоҡо ҡалдырып, дәресен әҙерләмәй килгән уҡыусыларға асыуланһам, миңә нимә тиерҙәр?” — тип һорауға һорау менән яуап бирер ине. Атайҙың шундай “етешһеҙ” яҡтарын һигеҙ балаһы ла, уҡыусылары ла һанап китһә, мәҡәлә түгел, китап яҙырға була.

Йомғаҡлап шуны әйтергә теләйем: үҙебеҙ ҙә ата-әсәләрбеҙ, ейәндәр ҙә буй еткән. Төп маҡсатыбыҙ — ғаиләлә атай кешенең урынын асыҡлау, ролен билдәләү, күтәреү, балаларҙы үҙебеҙҙең атай өлгөһөндә тәрбиәләү. “Минең балам үҙем тураһында үҫкәс нимә әйтер?” тигән һорауға яуап эҙләү ҙә әле ул.

Был хәтирәләрҙе иҫкә алыу фронтовик-уҡытыусыларҙың батырлыҡтары өсөн улар алдында баш эйеү, ғүмер буйына ҡылған яҡшы эштәренә рәхмәтебеҙҙе белдерергә ынтылышыбыҙ ине. Уларҙың ғүмере бөгөнгө йәштәргә үрнәк булһын, тип тә иҫкә алынды. Намыҫлы, ғорур һәм батыр кешеләр — улар илебеҙ тарихында иң ауыр дәүерҙә лә көр күңел менән йәшәнеләр. Был ҡиммәттәр бигерәк тә йәшәү мәғәнәһен эҙләгән йәш быуын өсөн кәрәк. Үткәнен белмәгәндәрҙең киләсәге юҡ, ти бит мәҡәл.